**Республика иншалар конкурсы**

# *Һуғыш өсөн дә, хеҙмәт өсөн дә миҙал бер үк металдан ҡойола*



*Башҡарҙы:* Сиразетдинова Лиана,
Федоровка 1-се муниципаль урта дөйөм белем белем биреү мәктәбенең 8 класс уҡыусыһы

*Тикшерҙе:* Туҡбаева Эльмира Рәфис ҡыҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

**2015 йыл**

Ветерандар атлап килә,

Орден – миҙал таҡҡандар.

Улар бит дошманды ҡырып,

Еңеү яулап ҡайтҡандар.

(Ф. Рәхимғолова)

Әле бынан ун-ун биш йылдар элек кенә ветерандар сафы һиҙелерлек тығыҙ ине. Уларҙы мәктәп уҡыусылары менән осрашыуҙарҙа, төрлө йәмәғәт эштәрендә йыш күрергә була ине. Ошо иҫтәлекле осрашыуҙарҙа, 9 май байрамы көндәрендә, беҙҙе, уҡыусыларҙы, иң ҡыҙыҡтырған әйберҙәрҙең береһе, әлбиттә, кемдең күпме миҙал таҡҡаны була. Ҡайһы бер ветерандарҙың миҙал-ордендары бихисап, бөтөн күкрәктәрен ҡаплаған, икенселәренең – әҙерәк, ә өсөнсөләрҙә бер-ике миҙал ғына таҡҡан. Ул ветерандарҙың күптәре яҡты донъянан киткән инде, ә бына костюм түштәренә тағылған миҙал-ордендары һаман күҙҙәрҙе ҡамаштыра...

Минең олатайым – Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, ә өләсәйем – тыл хеҙмәте ветераны. Икеһенең дә миҙалдары бик күп. Уларҙың хәрби билеттарын, миҙал-бүләктәрен ҡарайым. Яңынан-яңы һорауҙар яуҙырып ҡына торам. Ауыр йәшлек йылдарын күҙ алдыма баҫтырырға тырышам. Бына улар икеһе лә йәп-йәш егет һәм ҡыҙ. Береһе әле мәктәптә белем ала, ә икенсеһе инде еңел булмаған колхоз эшендә. Бер нисә мең километр йыраҡлыҡта, Европа ерҙәрендә бомбалар шартлай, ҡан ҡойола. Һуғыш ҡайҙалыр йыраҡта.

1941 йылдың 22 июнь таңы һуғыш менән башлана. Бөйөк Ватан һуғышы. Илебеҙ үҙ тормошон тамырҙан үҙгәртергә тейеш була. Барыһы ла фронт өсөн, барыһы ла Еңеү өсөн. Башҡаса мөмкин дә түгел. Әлеге йәш егет менән ҡыҙ ҙа, үҙ иленең граждандары – миллионлаған милләттәштәре кеүек шул дәүерҙең ауыр йөгөн үҙ елкәләренә һала. Түйғансы йоҡлауҙар онотола, алһыҙ-ялһыҙ эш көндәре башлана.

- Бер кеше лә ҡайҙа һәм ҡасан тыуырын белмәй, ләкин шуны онотмаҫҡа кәрәк: һин, тик һин билгеле бер ваҡытта үҙ илеңә иң кәрәкле кеше, һәр ваҡыт кәрәк, беҙ үҙебеҙҙең шул кәрәклегебеҙҙе аңланыҡ, - тип һөйләй минең өләсәйем, 85 йәшлек ағинәй. Мин уны һаман йәш ҡыҙ итеп күҙ алдыма килтерәм һәм уның һөйләгәндәре мине егерменсе быуаттың ҡырҡынсы йылдарына алып ҡайта.

- Еңел булманы, бөтөн ил шулай йәшәне. Был һүҙҙәрҙә тормош тәжрибәһе лә, беҙҙең халыҡҡа хас булған тыйнаҡлыҡ та бар.

Ярты ил һуғышта, ярты ил тылда.Үҙемде ҡыҙыҡтырған миҙалдар тураһында һораштыра башлайым. Олатайымдың һуғыштан алып ҡайтҡан һәм Еңеү

Ветерандар атлап килә,

Орден – миҙал таҡҡандар.

Улар бит дошманды ҡырып,

Еңеү яулап ҡайтҡандар.

Әле бынан ун-ун биш йылдар элек кенә ветерандар сафы һиҙелерлек тығыҙ ине. Уларҙы мәктәп уҡыусылары менән осрашыуҙарҙа, төрлө йәмәғәт эштәрендә йыш күрергә була ине. Ошо иҫтәлекле осрашыуҙарҙа, 9 май байрамы көндәрендә, беҙ уҡыусыларҙы иң ҡыҙыҡтырған әйберҙәрҙең береһе, әлбиттә, кемдең күпме миҙал таҡҡаны була. Ҡайһы бер ветерандарҙың миҙал-ордендары бихисап, бөтөн күкрәктәрен ҡаплаған, икенселәренең – әҙерәк, ә өсөнсөләре бер-ике миҙал ғына таҡҡан. Ул ветерандарҙың күптәре яҡты донъянан киткән инде, ә бына костюм түштәренә тағылған миҙал-ордендары һаман күҙҙәрҙе ҡамаштыра...

Минең олатайым – Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, ә өләсәйем – тыл хеҙмәте



ветераны. Икеһенең дә миҙалдары бик күп. Мин уларҙың хәрби билеттарын, миҙал-бүләктәрен ҡарайым. Яңынан-яңы һорауҙар яуҙырып ҡына торам. Ауыр йәшлек йылдарын күҙ алдыма баҫтырырға тырышам. Бына улар икеһе лә йәп-йәш егет һәм ҡыҙ. Береһе әле мәктәптә белем ала, ә икенсеһе инде еңел булмаған колхоз эшендә. Бер нисә мең километр йыраҡлыҡта, Европа ерҙәрендә бомбалар шартлай, ҡан ҡойола. Һуғыш ҡайҙалыр йыраҡта. 1941 йылдың 22 июнь таңы һуғыш менән башлана. Бөйөк Ватан һуғышы. Илебеҙ үҙ тормошон тамырҙан үҙгәртергә тейеш була. Барыһы ла фронт өсөн, барыһы ла Еңеү өсөн. Башҡаса мөмкин дә түгел. Әлеге йәш егет менән ҡыҙ ҙа, үҙ иленең граждандары – миллионлаған милләттәштәре кеүек шул дәүерҙең ауыр йөгөн үҙ елкәләренә һала. Туйғансы йоҡлауҙар онотола, алһыҙ-ялһыҙ эш көндәре башлана.

«- Бер кеше лә, ҡайҙа һәм ҡасан тыуырын белмәй, ләкин шуны онотмаҫҡа кәрәк: һин, тик һин билгеле бер ваҡытта үҙ илеңә иң кәрәкле кеше, һәр ваҡыт кәрәк, беҙ үҙебеҙҙең шул кәрәклегебеҙҙе аңланыҡ», − тип һөйләй минең өләсәйем, 85 йәшлек ағинәй. Мин уны һаман йәш ҡыҙ итеп күҙ алдыма килтерәм һәм уның һөйләгәндәре мине егерменсе быуаттың ҡырҡынсы йылдарына алып ҡайта.

«-Еңел булманы, бөтөн ил шулай йәшәне»,− был һүҙҙәрҙә тормош тәжрибәһе лә, беҙҙең халыҡҡа хас булған тыйнаҡлыҡ та бар.

Ярты ил һуғышта, ярты ил тылда.Үҙемде ҡыҙыҡтырған миҙалдар тураһында һораштыра башлайым. Олатайымдың һуғыштан алып ҡайтҡан һәм Еңеү юбилейҙарына бирелгән миҙалдары күп, ә өләсәйемдең – тылда эшләгән өсөн, шулай уҡ һуғыштан һуң тыныс тормошта, илде төҙөкләндереүҙә кереткән фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн алған бүләк-миҙалдары бар. Бер миҙалдарға, бер уларҙың хужаларына ҡарайым һәм ошо ялтыр миҙалдар артында ниндәй ғазап-юғалтыуҙар торғанын аңлағандай булам. Бер кеше лә ул ваҡытта орден-миҙалдар тураһында уйламағандыр, ә көнө-төнө үҙенең кәрәклеген тойоп, үҙенең эшен белеп, илебеҙҙә тыныслыҡ ҡошо тиҙерәк ҡанатын ҡаҡһын тип, бөйөк Еңеүҙе яҡынлаштырырға тырышҡан. Олатайым менән өләсәйемде алма баҡсаһына алып сығып, иҫтәлеккә фотоға төшөрәм. Оло йәшкә булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың йөҙҙәре шат, көләс.

Аяҙ, йылы, тыныс күктә ҡояш балҡый. Ике ябай ауыл кешеһенең күкрәгендәге миҙалдар ҡояш нурында осҡон булып ялтырай. Олатайымдың миҙалдары – дәһшәтле һуғыш өсөн, ә өләсәйемдеке – тылда күрһәткән фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн бирелгән. Осҡон-миҙалдар һуғыш өсөн дә, хеҙмәт өсөн дә бер үк металдан ҡойола һәм бер үк төрлө ялтырай. Ысынлап та, йөрәктәрендә ҡояш нурының осҡондарын йөрөткән кешеләр генә яуыз дошманды еңә алғандыр. Шул осҡондар бер ҡасан да һүрелмәһен, беҙгә лә күсеп, йылытып торһон ине...

Олатайым миҙалдары
Сыңғылдап сың – сың сыңлай
Мин тыңлайым шул сыңдарҙы
Һеңлем дә сыңды тыңлай.
Сың – сың сыңлайҙар
Беҙ еңдек тип йырлайҙар.
Олатайым оло яуҙа
Ауыр юлдарҙы үткән.
Еңеүсе олатайымды
Тыуған яҡтары көткән.






юбилейҙарына бирелгән миҙалдары күп, ә өләсәйемдең – тылда эшләгән өсөн, шулай уҡ һуғыштан һуң тыныс тормошта, илде төҙөкләндереүҙә кереткән фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн алған бүләк-миҙалдары бар. Бер миҙалдарға, бер уларҙың хужаларына ҡарайым һәм ошо ялтыр миҙалдар артында ниндәй ғазап-юғалтыуҙар торғанын аңлағандай булам. Бер кеше лә ул ваҡытта орден-миҙалдар тураһында уйламағандыр, ә көнө-төнө үҙенең кәрәклеген тойоп, үҙенең эшен белеп, илебеҙҙә тыныслыҡ ҡошо тиҙерәк ҡанатын ҡаҡһын тип, бөйөк Еңеүҙе яҡынлаштырырға тырышҡан. Олатайым менән өләсәйемде алма баҡсаһына алып сығып, иҫтәлеккә фотоға төшөрәм. Оло йәштә булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың йөҙҙәре шат, көләс.

Аяҙ, йылы, тыныс күктә ҡояш балҡый. Ике ябай ауыл кешеһенең күкрәгендәге миҙалдар ҡояш нурында осҡон булып ялтырай. Олатайымдың миҙалдары – дәһшәтле һуғыш өсөн, ә өләсәйемдеке – тылда күрһәткән фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн бирелгән. Осҡон-миҙалдар һуғыш өсөн дә, хеҙмәт өсөн дә бер үк металдан ҡойола һәм бер үк төрлө ялтырай. Ысынлап та, йөрәктәрендә ҡояш нурының осҡондарын йөрөткән кешеләр генә яуыз дошманды еңә алғандыр. Шул осҡондар бер ҡасан да һүрелмәһен, беҙгә лә күсеп, йылытып торһон ине...

Олатайым миҙалдары

Сыңғылдап сың – сың сыңлай,

Мин тыңлайым шул сыңдарҙы

Һеңлем дә сыңды тыңлай.

Сың – сың сыңлайҙар,

Беҙ еңдек тип йырлайҙар.

(Р. Ураҡсина)